«КИЛЕШЕЛГӘН»

Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошма директоры

Г.Р. ЙОСОПОВА

«РАҪЛАЙЫМ»

Башҡортостан Рспубликаһының мәғариф һәм фән министры, ойоштороу комитеты рәйесе

А.В. ХАЖИН

«КИЛЕШЕЛГӘН»

«Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)» йәмәғәт берекмәләренең халыҡ-ара союзы президиумы рәйесе

Э.Р. АЙЫТҠОЛОВА

**2020 йылда "БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН ХАЛЫҠ-АРА ДИКТАНТ" халыҡ-ара белем биреү акцияһын ойоштороу һәм үткәреү тураһында ПОЛОЖЕНИЕ**

## 1. Дөйөм положениелар

1.1. Был положение 2020 йылда «Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант» халыҡ-ара белем биреү акцияһын (артабан — Диктант-2020) үткәреү тәртибен һәм шарттарын билдәләй.

1.2. Илдәге һәм донъялағы эпидемиологик хәлдәргә бәйле Диктант-2020 «Интернет» мәғлүмәт-телекоммуникация селтәре аша онлайн-форматта, шулай уҡ «Башҡортостан юлдаш телевидениеһы» телеканалында тура эфирҙа үткәрелә.

1.3. Диктант-2020 ойоштороусылары: Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығы (артабан – Министрлыҡ), Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошма (артабан – Фонд), «Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)» йәмәғәт берекмәләренең халыҡ-ара союзы.

1.4. Диктант-2020 түбәндә тәҡдим ителгән варианттарҙың береһендә яҙыла:

- башҡорт телен башланғыс кимәлдә белеү;
- башҡорт телендә иркен аралашыу;
- башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында.

1.5. Диктант-2020 – теләге булғандарҙың барыһы өсөн тәғәйенләнгән ирекле һәм түләүһеҙ белем биреү акцияһы.

1.6. Диктант-2020 темаһы һәм тексы ойоштороу комитеты тарафынан билдәләнә. Диктант-2020 тексын һайлау өсөн ойоштороу комитеты тарафынан ғалим-филологтар, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары йәлеп ителә.

1.7. Диктант-2020 брендбугы булдырыла.

1.8. Диктант-2020 әҙерләүгә һәм уны үткәреүгә дөйөм етәкселекте ойоштороу комитеты, оператив етәкселекте эш комитеты башҡара. Ойоштороу комитеты һәм эш комитеты составына Министрлыҡ, Башҡортостан Республикаһының матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, Фонд, Башҡорт дәүләт университеты, М. Аҡмулла ис. Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Башҡортостан Республикаһы Мәғарифты үҫтереү институты, «Башҡортостан» телерадиотапшырыуҙар компанияһы, «Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)» йәмәғәт берекмәләренең халыҡ-ара союзы вәкилдәре индерелә һәм Министрлыҡтың бойороғо менән раҫлана.

1.9. Диктант-2020 һөҙөмтәләрен эшкәртеү өсөн ғалим-филологтарҙан, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларынан, шулай уҡ Диктант-2020 рәсми сайтында теркәлгән эксперттарҙан торған Эксперт комиссияһы булдырыла.

1.10. Диктант-2020 рәсми партнерҙары булып киң мәғлүмәт саралары сығыш яһай ала.

1.11. Диктант-2020 тураһында тулы мәғлүмәт http://bashkdictant.ru рәсми сайтында урынлаштырыла.

1.12. Диктант-2020 девизы: «Башҡорт телендә һөйләшәм, башҡорт телендә яҙам».

## 2. Диктант-2020 үткәреүҙең маҡсаты, бурыстары һәм принциптары

2.1. Диктант-2020 маҡсаты – киң йәмәғәтселектең башҡорт телен өйрәнеүгә иғтибарын арттырыу, тел мәҙәниәтен үҫтереү, башҡорт телен Башҡортостан Республикаһында, Рәсәй Федерацияһы өлкәләрендә һәм сит илдәрҙә танытыу һәм популярлаштырыу.

2.2. Диктант-2020 бурыстары:

телəге булған һəр кемгə Диктант-2020 барышында үҙенең грамоталылыҡ кимəленə ирекле баһа алыу мөмкинлеген биреү;

башҡорт телен һаҡлау һəм үҫтереү мəсьəлəһенə йəмəғəтселектең иғтибарын йəлеп итеү;

башҡорт телен популярлаштырыуҙа телмəр һəм яҙма коммуникацияны модалы һəм заманса алым булараҡ ҡулланыу;

башҡорт телен өйрəнеүгə ылыҡтырыу.

2.3. Диктант-2020 үткəреү түбəндəге принциптарға нигеҙлəнə:

иреклелек принцибы: диктантҡа əҙерлек, уны үткəреүҙə һəм яҙыуҙа ҡатнашыу ирекле, телəк буйынса;

асыҡлыҡ принцибы: диктант яҙыуҙа йəше, белеме, ижтимағи хəле, инаныуҙары һəм гражданлығы ниндəй булыуға ҡарамаҫтан телəге булған һəр кеше ҡатнаша ала;

мөмкинлек принцибы: диктант яҙыу түлəүһеҙ, һəр кемгə диктантта ҡатнашырға мөмкинлек, эште тикшереүгə һəм http://bashkdictant.ru сайтында һөҙөмтəлəр менəн танышыуға гарантия бирелə;

анонимлыҡ принцибы: диктант яҙыуҙа ҡатнашыусылар үҙҙəренең шəхси мəғлүмəттəрен күрһəтмəүе лə ихтимал;

компетентлыҡ принцибы: диктант тексын билдəлəүгə һəм ҡатнашыусыларҙың эшен тикшереүгə танылған эксперттар йəлеп ителə.

## 3. Диктант-2020 ҡатнашыусылары

3.1. Һəр кеше енесенə, расаһына, миллəтенə, теленə, сығышына, матди һəм вазифа хəленə, йəшəгəн урынына, дингə мөнəсəбəтенə, инаныуҙарына, йəмəғəт берекмəлəренə инеү-инмəүенə, шулай уҡ башҡа хəлдəргə ҡарамаҫтан Диктант-2020 ҡатнаша ала.

3.2. Диктант-2020 ҡатнашыр өсөн http://cabinet.bashkdictant.ru/ рəсми сайтында теркəлергə, шулай уҡ диктант үткəн көндə «Интернет» мəғлүмəт-телекоммуникация селтəре, «Башҡортостан юлдаш телевидениеһы» телеканалы аша диктантты онлайн яҙырға мөмкин.

3.3. Диктант-2020 ҡатнашыусы башҡорт телен белеү кимəлен Диктант-2020 рəсми сайтында теркəлеү үткəндə билдəлəй ала.

## 4. Диктант-2020 үткәреү ваҡыты

4.1. Диктант-2020 Рәсәй Федерацияһының бөтә өлкәләрендә һәм сит илдәрҙә бер үк көндә тура эфирҙа үткәрелә.

4.2. Диктант-2020 **2020 йылдың 25 апрелендә** уҙғарыла.

4.3. Тура эфир **11:00 сәғәттә** башлана:

**сәғәт 11:00-ҙән сәғәт 11:25-кә тиклем** – башҡорт телен башланғыс кимәлдә белеүселәр өсөн;

**сәғәт 11:30-ҙан сәғәт 11:55-кә тиклем** – башҡорт телендә иркен аралашыусылар өсөн;

**сәғәт 12.00-нән сәғәт 12.20-гә тиклем** – башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында яҙыусылар өсөн.

4.4. Диктантты шулай уҡ 2020 йылдың 26 апреленең Өфө ваҡыты менән сәғәт 23:59-ға тиклем http://bashkdictant.ru рәсми сайтында һәм ойоштороусыларҙың социаль селтәрҙәрҙәге сәхифәләрендә (www.instagram.com, vk.com/bash_fond) эфирҙың видеояҙмаһын ҡарап, яҙырға мөмкин.

## 5. Диктант-2020 рәсми сайты

5.1. Диктант-2020 ойоштороуҙы һәм үткәреүҙе мәғлүмәти йәһәттән тәьмин итеү маҡсатында «Интернет» мәғлүмәт-телекоммуникация селтәрендә Диктанттың рәсми сайты (артабан – Сайт) эшләй. Сайтта насар күргән кешеләр өсөн версия ла бирелә.

5.2. Сайт http://bashkdictant.ru адресы буйынса урынлашҡан.

5.3. Сайт түбәндәге бүлектәрҙе үҙ эсенә ала:

Диктант-2020 ойоштороу һәм үткәреү тураһындағы положение;

әҙерлек материалдары;

ҡатнашыусыларҙы теркәү;

ойоштороусылар һәм эксперттар тураһында мәғлүмәттәр;

Диктант-2020 үткәреүгә бәйле яңылыҡтар;

бәйләнештәр.

5.4. Диктант-2020 ҡатнашыусылар Сайтта теркәлергә **тейеш**, шулай уҡ теләге булһа башҡорт телен белеү кимәлен билдәләү йәһәтенән тест эшләй ала.

5.5. Сайт менән ҡулланыусы Диктант-2020 үткәреү көнө һәм ваҡыты тураһында белдереү, шулай уҡ тура эфирҙы ҡарауға һылтанмалар ала.

5.6. Диктант-2020 үткәрелгән көндә Сайтта тура тапшырыуҙы асыҡтан-асыҡ ҡарау мөмкинлеге бирелә.

## 6. Диктант-2020 ойоштороу һәм үткәреү

6.1. Диктант-2020 тексы күләме башҡорт телендә иркен аралашыусылар өсөн 250 һүҙҙән, башҡорт телен башланғыс кимәлдә белеүселәр өсөн 170 һүҙҙән, башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында яҙыусыларға 150 һүҙҙән артмаҫҡа тейеш.

6.2. Диктантта ҡатнашыусылар эштәрен ирекле формала ҡағыҙ битендә яҙа, фамилияһын, исемен, атаһының исемен, йәшәү урынын теләге булһа күрһәтә.

6.3. «Интернет» мәғлүмәт-телекоммуникация селтәре аша диктант яҙыусыларҙың эштәре Сайттағы шәхси кабинет аша ҡабул ителә.

6.4. Башҡарылған эштәрҙең фотоһы, скан варианты түбәндәге юлдарҙың береһе аша ебәрелә ала:

1) bashkdiktant2020@mail.ru электрон почтаһына;
2) +7 (927) 950 - 02 - 66 Whatsapp мессенджер номерына;

6.6. Тикшереүгә тапшырылған эштәргә рецензия бирелмәй, эштәр ҡатнашыусыларға кире ҡайтарылмай. Эште тикшереү йомғаҡтары буйынса апелляцияға биреү ҡаралмаған.

## 7. Диктант-2020 йомғаҡ яһау

7.1. Диктант-2020 яҙыу һөҙөмтәләре ул үткәрелгәндән һуң 30 көндән дә һуңға ҡалмайынса http://bashkdictant.ru сайтында баҫтырыла.

7.2. Эштәрен әлеге положениеның 6.3, 6.4 пунктарына ярашлы ебәргәндән һуң диктантта ҡатнашыусыларға сертификаттар Сайттағы шәхси кабинеттары аша йә электрон почтаға ебәреләсәк.

7.3. Диктант-2020 һөҙөмтәләре буйынса Ойоштороу комитеты эксперттарҙы рәхмәт хаттары һәм ҡиммәтле приздар менән бүләкләй.

## 8. Диктант-2020 ойоштороусылары менән бәйләнеш

8.1. Бәйләнештәге етәкселәр:

| | | |
|---|---|---|
| Зинуров Булат Илшад улы | Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығының Милли мәғариф идаралығы начальнигы | +7 (347) 218-03-53 |
| Йосопова Гөлназ Рауил ҡыҙы | Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошма директоры | +7 347 246-58-24 |
| Сафиуллина Розалия Расих ҡыҙы | Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығы Милли мәғариф идаралығының милли мәғариф бүлеге начальнигы | +7 (347) 218-03-52 |
| Ҡаһарманов Илдус Фәнил улы | Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығы Милли мәғариф идаралығының дәүләт программаларын тормошҡа ашырыу һәм регион-ара хеҙмәттәшлек бүлеге начальнигы | +7 (347) 218-16-93 |
| Һөйәрғолова Гөлназ Ғәйәр ҡыҙы | Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) башҡарма комитеты аппараты баш белгесе | +7 917 760-11-35 |

8.2. Диктантҡа социаль селтәрҙәрҙә һылтанмалар: vk.com/bashdictant, vk.com/bash_fond, instagram.com/bash_fond, www.facebook.com/fondbash.